**Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә**
**«Һыуҙың өс сере» темаһына тәжрибә үткәреү**

**Маҡсат:** балаларҙың һыуҙың үҙенсәлектәре тураһында алған белемдәрен дөйөмләштереү, һыуҙың бер хәлдән икенсегә күсеүен тәжрибәләр аша нығытыу (ҡар – боҙ, һыу – пар). Һыу әйләнеше тураһында, һыуҙың кешеләр, йәнлектәр, үсемлектәр өсөн әһәмиәтен дөйөмләштереү. Балаларҙың аң-зиһенен, фекерләү ҡеүәһен, телмәрен үҫтереү.

**Һүҙлек эше:** һыу әйләнеше, шыма, шыйыҡ, ҡаты, пар.

**Йыһазландырыу:** фоноязма, кеше организмы һүрәте, стакандар, ҡалаҡ, сәй, шәкәр, ҡом, боҙ, ҡар, тамсы һүрәттәре.

**Ҡулланылған материал:** төрлө формалағы һауыттар, стакандарҙа һыу, һөт, ҡалаҡ, сәй, шәкәр, ҡом, боҙ, һыу, ҡар.

**Барышы**

- Балалар, йомаҡты сисегеҙ әле: «Күктән килде, ергә китте». *Фоноязма тыңлау (ямғыр яуыуы).*
- Ямғыр яуғас, тып та тып тамсылар тамды: бер, ике, өс... һанап бөтөрөрлөк түгел. Улар бергә йыйылып, гөрләүек булып ағып киттеләр. Тамсылар бер-береһе менән Һөйләште. Бер тамсы: «Эх, бер урында торорға яратмайым, сәйәхәт итергә яратам», - тине.
Бына ошо сәйәхәт итеүсе тамсы беҙгә ҡунаҡҡа килгән. *(Тәрбиәсе ҙур тамсы һүрәтен элеп ҡуя.)*
- Ул һеҙҙең һыу тураһында нимәләр белеүегеҙҙе белгеһе килә. Һөйләйекме тамсыға?
- Балалар, кешеләргә һыу ни өсөн кәрәк? *(Йыуынырға, эсергә, аш бешерергә, һауыт-һаба йыуырға...)*
- Тағы нимәләргә кәрәк? *(Үҫемлектәргә, хайуандарға.)*
*Кеше организмы һүрәте ҡуйыла.*
- Кеше организмының күп өлөшөн һыу тәшкил итә. Кеше ашамайынса бер нисә көн йәшәй ала, ә һыуһыҙ йәшәй алмай, тимәк, кеше организмына ла һыуҙың әһәмиәте бик ҙур.
- Ер йөҙөндә һыу булмаһа, нимә булыр ине? *(Бөтә тере нәмә үлер ине.)*
- Эйе, һыу ерҙәге иң кәрәкле байлыҡ.
Балалар, әйҙәгеҙ, тамсыҡайға төрлө тәжрибәләр үткәреп күрһәтәйек.

*Балалар өҫтәл янында торалар. Өҫтәлдәрҙә төрлө формалағы һауыттар, стакандарҙа һыу, һөт, калак, сәй, шәкәр, ком.*
- Балалар, кем һыуҙың формаһы тураһында һөйләй ала?

*Балалар менән тәжрибә эшләү.*

- Һыуҙың үҙенең формаһы юҡ. Ниндәй формалағы һауытҡа ҡойһаң, шул һауыттың формаһын ала.
- Һыуҙың еҫе бармы? *(Еҫе юк.)*
- Кем һыуҙың төҫө тураһында һөйләй ала? *(Һөтлө һауытка калак төшөрһәң, калак күренмәй – һөт ак төҫтә, үтә күренмәй. Һыуҙа калак үтә күренә, һыу үтә күренеүсән, төҫө юк.)*

*«Болот һәм тамсылар» уйыны.*
- Хәҙер уйнап алайыҡ инде. Мин болот-әсәй булам, ә һеҙ – балалар-тамсылар. Балалар көй аҫтында ямғыр булып йүгереп йөрөйҙәр ҙә, кире болот булып йыйылалар.

*Өҫтәлдәргә боҙ, һыу, ҡар ҡуйыла.*
- Балалар,тағы бер йомаҡты сисегеҙ:

Утта янмай, һыуҙа батмай. *(Боҙ.)*

- Боҙҙо тотоп ҡарағыҙ һәм боҙ тураһында һөйләгеҙ, ниндәй ул? *(Боҙ ҡаты, һыуыҡ, шыма, тигеҙ, үтә күренмәй.)*
- Хәҙер бөтәгеҙ ҙә боҙҙарҙы һыуға һалығыҙ.
- Боҙ һыуҙа батамы, юҡмы? *(Боҙ һыуҙан еңелерәк, шуға батмай.)*
- Боҙ утта янамы? *(Янмай, йылыла боҙ ирей.)*
- Тимәк, боҙ – ул ҡаты хәлдәге һыу.
- Шулай итеп, һыу бер туктауһыҙ сәйәхәт итә. Тамсыҡай ҙа, төрлө хәлгә инеп, тәбиғәттә сәйәхәт иткән.

**Йомғаклау.**